Башҡортостан Республикаһы

Кырмыҫкалы районы муниципаль районы хакимиәте

Муниципаль  дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы

Бекетов төп дөйөм белем биреү мәктәбе

| Каралды | Килешелде | Раҫлайым |
| --- | --- | --- |
| МБ ултырышында | Уҡытыу эштәре буйынса | мәктәп директоры |
| протокол № 1 | директор урынбаҫары | --- Е.В.Маркелова. |
| «28» 08 2015 йыл | ______В.С. Гусева | «1» 09 2015 йыл |
| ______А.В.Матвеева. | «31» 08 2015 йыл | |

2015-2016 уҡыу йылына

7 класс өсөн башҡорт (дәүләт) теленән

эш программаһы

Төҙөнө:

башҡорт теле уҡытыусыһы

Йәнешева Зөбәйҙә Әбүзәр ҡыҙы.

Бекетов ауылы

## Аңлатма яҙыу.

Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы 29.12.2012 й. № 273;
«Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы
Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-се класы өсөн башҡорт (дәүләт) теленән эш программаһы.
Дәреслек**:** Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-се синыф уҡыусылары өсөн дәреслек. Усманова М.Ғ,Ғәбитова З.М.

### Уҡыу предметына дөйөм характеристика.

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З.М., Усманова М.Г. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.

Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәкдим ителгән программа «Бекетов урта дөйөм белем биреү мәктәбе» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының « Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:
«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы.

Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән:

1. Балаларҙы һөйләшергә өйрәтеү үҙәк бурыс.
2. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә
3. (коммуникатив йүнәлеш).

### Маҡсаттар һәм бурыстар.

- Уҡыусыларҙа башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды, радиотапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование).
- Аралашыуҙа кәрәк була торған типик һөйләмдәрҙе күсереп, үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу.
- Башҡорт телен өйҙә, йәмәғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү.
- Башҡорт телен практик өйрәнеүгә бәйләп, балаларҙы башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, милли йолалары, башҡорт халҡының күренекле шәхестәре, уларҙың эшмәкәрлеге, ижады һәм башҡалар менән таныштырыу, балаларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, үҙҙәре йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү. Текстағы яңы һүҙҙәр, фразаларҙы аңлатыу, һүҙлек эше үткәреү мотлаҡ.
- Әҫәрҙе өлөшләп, һайлап, ролдәргә бүлеп, сылбыр буйынса уҡыу, тексты магнитофон яҙмаһынан тыңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү кеүек эштәр башҡарғанда, һүҙлек эше иғтибар үҙәгендә тора.
- 6-7-се кластарҙа алған белемдәр тулыландырыла. Темалар буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар уҡыу, диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә.
- Туған тел, белем, уҡытыусы, мәктәп һәм көҙгө байлыҡ тураһында һөйләшеү күберәк урын ала.
- Бәйләнешле текст төҙөү, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәр

Уҡыу планына ярашлы «Башҡорт теле» дәреслегенә 70 сәғәт.

Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар.

Уҡытыусы укыған йәки һөйләгән, үҙең укыған тексты аңлай алыу;
Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған фильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;
Предметты, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү;
Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;
10 – 15 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
Тексты шыма, аңлы, дөрөҫ, тотош һүҙләп уҡыу, логик баҫымдарҙы, паузаларҙы дөрөҫ әйтеү; тасуири укыу; текстың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү, өҙөк буйынса план төҙөү; текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе, һүрәтләү, тасуирлау сараларын табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;
Хикәйә, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ жанрҙарын практик айыра белеү;
Ҙур булмаған һөйләмдәрҙе күсереп һәм яттан яҙыу; текст, күҙәтеүҙәр йәки экскурсия буйынса һорауҙарға яуап яҙыу; бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү

Уҡығанды, һөйләгәнде аңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙар, һәм шул һорауҙарға яуап бирә белеү;

Прозаик текстарҙы дөрөҫ, шыма, аңлы уҡыу белеү;

Уҡылған тексты өлөштәргә бүлеү,исем биреү, элементар план төҙеү;

Текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәрҙе файҙаланыу;

Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәргә эйә булыу;

Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтарын белеү;

Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур , дөрөҫ яҙа белеү;

Өйрәтеү диктанттар яҙа белеү.

Уҡыу-уқытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.
Уларға түбәндәгеләр инә:
Башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;

тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);

дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;

һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;

тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, укыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә унын бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

Яҙма эштәрҙең төрҙәре:
Күсереп яҙыу - 2
Һорауҙарға яуаптар-2
Диктант- 4
Изложение – 1
Инша - 1

«Башҡорт  теле» предметының өйрәнеү һөҙөмтәләре

Төп дөйөм белем биреү мәктәбенең сығарылыш уҡыусыларының башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙә шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:

1) башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

2) башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли-мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;

3) аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү әсән тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙең метапредмет һөҙөмтәләре:

1) телмәр эшмәкәрлегенең-бөтә төрҙәрен үҙләштереү: аудирование һәм уҡыу:

• телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;

• төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү); төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;

• төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; аудирование менән эш итеү (һайлап алыу, танышыу);

• төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлелеге (матбуғат саралары, уҡыу әсән тәғәйенләнгән компакт-дискы-лар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу; белешмә әсән әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәһен булдырыу;

• һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;

• стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

һөйләү һәм яҙыу:

• алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллек-тив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, эштең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;

• тыңланған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;

• төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;

• телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;

• төрлө төрҙәге монологты (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалогты (этикетты үҙ эсенә алған, диалог-һорашыу, диалог-аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ. б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүе) үҙләштереү;

• ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;

• телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу процесында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;

• уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба, уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;

• үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһау; бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;

2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа төрлө фәндәрҙән белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет-ара (сит тел, әҙәбиәт һ. б. дәрестәрҙә) ҡуллалыу;

3) аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; формаль һәм формаль булмаған шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхси, метапредмет , предмет һөҙөмтәләр.

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.
Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана алаУҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала.

| | |
|---|---|
| Күсереп яҙыу | 1 |
| һорауҙарға яуап | 2 |
| Диктант | 5 |
| Изложение | 3 |

| **Эш төрҙәре** | **7 класс** |
|---|---|
| һүҙлек диктанты | 12-15 |
| Диктант | 40-50 |
| Изложение | 40-50 |
| Инша | 45-55 |

Яҙма эш төрҙәре (изложение,инша) яҙыу уҡыусыларҙың уҡыу кимәленә, белеменә, мөмкинселегенә ҡарап уҡытыусы ҡарамағына ҡалдырыла һәм улар урынына шул уҡ күләмдә түбәндәге яҙма эштәр үткәрергә мөмкин:

-карточкалар менән эш;
-тест;
-һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү;
-текста һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе;
-терәк текстар менән инша яҙырға өйрәнеү:
-һүҙлек диктанты;
-һөйләмдәр төҙөү;
-һүҙлек менән эш;
-һүрәтләү иншаһы;
- слайд төҙөү: шәжәрәләр, минең ғаиләмде…

Диктанттарҙы баһалау

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим иттеләр.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.

Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
4) механик рәүештө бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана.

«5» билдәһе — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

«4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуациоң, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә

«2» билдәһе бер эш тә эшләнмәгәндә ҡуйыла.

## Уҡыу тиҙлеген тикшереү

Башланғыс кластарҙан алып, һәр бала билдәле бер кимәлдә, тиҙлектә шыма итеп уҡый белергә лә бурыслы. Ғөмүмән, етеҙ, дөрөҫ, тасуири уҡыу, уҡырға өйрәтеү әҙәбиәт дәрестәренең тәүге мөһим талаптарының береһе. Уны, йәғни уҡыу тиҙлеген, 1 бала минутына күпме һүҙ укыуына ҡарап . Һәр сирек һайын бер тапҡыр уҡыу тиҙлеге тикшерелә. Баһалар класс журналына ҡуйыла. Түбәндә башланғыс кластарҙан алып, уҡыусы минутына күпме һүҙ уҡырға тейеш булған һандар килтерелә. Уларға ҡарап, уҡыу тиҙлегенә ниндәй талаптар ҡуйылғанын билдәләргә мөмкин.

Баһалар

| Баһалар кластар | «5» | «4» | «3» | «2» |
|---|---|---|---|---|
| I | 30 | 25 | 15 | 15-тән кәмерәк |
| II | 55 | 45 | 30 | 30-ҙан кәмерәк |
| III | 65 | 55 | 40 | 40-тан кәмерәк |
| IV | 80 | 75 | 55 | 55-тән кәмерәк |
| V | 100 | 90 | 80 | 80-дән кәмерәк |
| VI | 110 | 100 | 90 | 90-дан кәмерәк |
| VII | 120 | 110 | 100 | 100-ҙән кәмерәк |
| VIII | 130 | 120 | 110 | 110-дан кәмерәк |
| IX | 140 | 130 | 120 | 120-нән кәмерәк |
| 10 | 150 | 140 | 130 | 130-ҙан кәмерәк |
| 11 | 160 | 150 | 140 | 140- тан кәмерәк |

Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала.

Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

Яңынан мәктәпкә

6 класта алған белемдәрҙе тулыландырыу. Был тема буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар уҡыу. Диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә. Туған тел, белем, уҡытыусы, мәктәп һәм көҙгө байлыҡ тураһында һөйләшеү күберәк урын ала. Бәйләнешле текст төҙөү, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәре башҡарыла. Көҙ, көҙгө эштәр, уңыш йыйыу темаһы төп урындарҙың береһен алып тора.

Мәктәп, уҡыу, китап, икмәк, уңыш, емеш-еләк тураһында мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар менән танышыу.

Грамматика:

6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Ауыл тормошо

Ауыл тормошо, ауыл кешеләренең көнкүреше, хеҙмәт, игенсе хеҙмәте тураһында әңгәмәләр үткәреү. Игенсе эшенең нескәлектәрен һөйләү. Ауыл тормошоноң ҡала тормошонан айырмалы яҡтары тураһында аңлатыу. Ауыл еренән сыҡҡан күренекле шәхестәрҙең тормош юлы менән таныштырыу, осрашыуҙар ойоштороу. Был тема буйынса яҙылған әҫәрҙәр уҡыу.

Грамматика:

Ҡылым.һүҙбәйләнеш.һөйләм төҙөлөшө.

Башкортостан буйлап сәйәхәт

Башҡортостан тураһында 1-6 кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлап, белгән фактик материалды эҙмә-эҙлекле итеп һөйләргә өйрәнеү. Был тема буйынса уҡыусыларға яңы мәғлүмәт биреү. Тыуған еребеҙҙең сал тарихы барлығын, Башҡортостан тураһында рус яҙыусылары, «Урал» эпосы, һуңғы йылдарҙағы тарихи Башҡортостан ерендә үткәрелгән фәнни экспедициялар мәғлүмәттәре менән таныштырып китеү («Арҡайым», «Сынташты», боронғо ҡалалар, алтын әйберҙәр табыу һ.б. тураһында), бының өсөн һуңғы йылдарҙа сыҡҡан матбуғат баҫмаларына мөрәжәғәт итеү. Был тема буйынса тәҡдим ителгән әҫәрҙәр менән танышыу, уҡыусыларҙың яҙыу һәм һөйләү телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш алып барыла.

Грамматика:

Яңғыҙлыҡ исемдәр.

Спорт. Спорт кәрәк-ярактары

Кешегә сәләмәт булыу өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икәнлеген аңлатыу һәм был турала уҡыусылар менән һөйләшеү, әңгәмә ойоштороу. Уҡыусылар үҙҙәре спорт менән ҡыҙыҡһыныуҙары, күренекле спортсмендар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Спорт тураһында теле-радио тапшырыуҙары, газета материалдары буйынса һөйләү.

Башкортостанда спорт төрҙәре. Спорт өлкәһендә данлыҡлы кешеләр.

Грамматика:

Башҡорт теленең үҙенсәлекле хәреф, өндәре, һөйләм төрҙәре.

Мин һәм беҙҙең ғаилә

Уҡыусы үҙенең ғаиләһе тураһында тулы һәм иркен һөйләй белергә тейеш. Сөнки был тема йылдан-йыл ҡабатлана. Ғаилә ағзаларын дөрөҫ атау, уларға ихтирамлы, иғтибарлы булырға өйрәтеү. Ғаилә, ғаилә ағзалары тураһында яҙылған әҫәрҙәр уҡыу, уларҙы аңлы ҡабул итергә өйрәтеү, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү. Уҡылған әҫәрҙәр буйынса план төҙөргә өйрәтеү, план буйынса һөйләү. Телмәр үҫтереүгә айырым иғтибар бирелә. Был бүлектә билдәле рәссамдарҙың әҫәрҙәре күп кенә урын алған. Картинаны ҡарай, аңлай һәм уның йөкмәткеһен һөйләргә өйрәтеү.

Грамматика:

Ҡылым. Ҡылымдарҙың заман, зат, һан менән үҙгәреше.

Әсәйҙәр байрамы.

Әсәй, өләсәйҙәрҙең изгелеге, ҡәҙере хаҡында әҫәрҙәр уҡыу, йөкмәткеһе өҫтөндә эш төрҙәре башҡарыу, һүҙлек байлыҡтарын арттырыу. "Катын-ҡыҙҙар байрамы тураһында әңгәмәләр, иртәлектәр үткәреү, данлыҡлы ҡатын-ҡыҙҙар менән осрашыуҙар ойоштороу.

Грамматика:

Теркәүес тураһында төшөнсә. Теҙеү теркәүестәре.

Сәнғәт оҫталары.

Республиканың данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре менән танышыуҙы дауам итеү. Сәнғәт оҫталарының тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу. Теле-радио тапшырыуҙар, яҙмалар ҡарау. Уларҙың әҫәрҙәрен таныу, данлыҡлы кешеләребеҙ тураһында һөйләй белеү. Йырҙар өйрәтеү, бергәләп йырлау, һәләтле балалар менән йырҙар өйрәнеү. Мәктәп сәхнәһе өсөн концерт номерҙары әҙерләү.

Грамматика:

Эйәртеү теркәүестәре. Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Теркәүес темаһын нығытыу.

Исемең матур, кемдәр ҡушҡан? Исемдәрҙә - ил тарихы.

Был тема кеше исемдәренән башҡа тау, ер, һыу атамалары мөнән берлектә алып барыла. Исемдәрҙең мәғәнәһе, уның кеше холоҡ-фиғеленә тәьҫир итеүе. Данлыҡлы кешеләрҙең исемдәренә бәйләп, төрлө тарихи ваҡиғалар һөйләү, әҫәрҙәр уҡыу. Атамалар буйынса легендалар, риүәйәттәр уҡыу ҙа дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп үткәрергә ярҙам итәсәк.

«Исемдәрҙә – ил тарихы», «Исемең матур, кемдәр ҡушҡан?» темаһына иртәлектәр үткәреү, уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтерергә, кеше алдында сығыш яһау өсөн ярҙам итәсәк.

Грамматика: Бәйләүестәр. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәһен ҡабатлау.

Борон-борон заманда...

Башҡорт халыҡ ижады темаһын киңәйтеү, уҡыусыларҙың белгәндәрен тулыландырыу, һүҙ байлығын, һөйләү телмәрен үҫтереү маҡсат булып тора. Күберәк иғтибарҙы тексты аңлы ҡабул итеү һәм йөкмәткеһен һөйләй белеүгә йүнәлтеү. Бында башҡорт халыҡ әкиәттәренән башҡа, Ф.Туғыҙбаеваның «Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?» әкиәте лә урын алған. Уларҙың айырмаһын билдәләп үтеү кәрәк.

Грамматика:

Киҫәксә тураһында төшөнсә.Киҫәксәләрҙең бүленеше. Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы.

Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ.

Иң төп темаларҙың береһе - берҙәмлек, дуслык, тыныслыҡ. Бында тик кешеләр араһындағы дуҫлыҡ тураһында ғына һөйләшеү бармаясаҡ, ә халыҡ-ара булған мөнәсәбәттәр ҙә иғтибар үҙәгендә торорға тейеш. Был тема буйынса уҡыусыларҙы аңлап фекер йөрөтөргә һәм һөйләй белергә өйрәтеү. Уҡылған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса фекер алышыу, әңгәмә ойоштороу.

Грамматика:

Мөнәсәбәт һүҙҙәр. Ымлыҡтар. Уларҙың дөрөҫ яҙылышы.

Йәмле йәй.

Йәй миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Уҡыусыларҙың һүҙ байлығын арттырыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү. Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса фекер алышыу. Был айҙарҙа уҙғарылған Милли байрамдар менән таныштырыу, улар тураһында белгәндәрен һөйләү. Балаларҙың йәйге ялы, хеҙмәте, ололарға ярҙамы тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү.

Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар

7 класс өсөн телмәр күнекмәләре:

–Өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең авторын, исемен белеү;
–Яҙыусы ижад иткән художестволы картиналарҙы уйлап күҙ алдына баҫтырыу;
–Эпик һәм лирик әҫәрҙе айыра белеү;
–Программала ятлау өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙең тексын ятлау, 8-10 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
–Художестволы, фәнни популяр һәм публицистик текстарҙы ҡысҡырып, етеҙ уҡыу;
–Художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу;
–Ҙур булмаған хикәйәләрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләп биреү.
–Йәмғиәт тормошонда телдең роле; туған телдең әһәмиәте;
–Фонетика, телмәр өндәре, ижек, баҫым, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр;
–Графика, алфавит; хәрефтәрҙең өндәрҙе сағылдырыуы төшөнсәләре;
–Лексика; һүҙҙең лексик мәғәнәһе; һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе; синоним, антоним, омоним;
–Исемдәрҙең һан, килеш менән үҙгәреше, күплек һәм килеш ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы, яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы;
–Ҡылымдарҙың заман, һан, зат менән үҙгәреше;
–Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре, уларҙың яҙылышы, һөйләмдәге роле.
–Ижади диктанттар, изложениелар һәм иншалар яҙыу.

Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау
Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.

Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Башҡорт (дәүләт) телен өйрәнеү өсөн уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар

Башҡорт теленән программа. (Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең I – XI кластары өсөн). Төҙөүселәре: Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.
Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге. Урал ҡсин З.Г. – Өфө, 2004.
Русса-башҡортса һүҙлек. Ураҡсин З.Г., Саяхова К.Г. – Өфө, 1997.

Омонимдар һүҙлеге. Әхтәмов М.Х. – Өфө, Китап, 2006.
Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. Ураҡсин З.Г. – Өфө, Китап, 2006.
Башҡортостан энциклопедияһы. Шәкүров Р.З. – Өфө, Китап, 1997.
Балалар әҙәбиәте антологияһы. Әлибаев С. – Өфө, Китап, 1999.
Электрон дәреслек. Башҡорт (дәүләт) теле. 5-11 – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2003.
Электрон дәреслек. Башҡорт әҙәбиәте. 5-9 класс – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2003.
Раҡаева Ә.С., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теленән контроль һорауҙар, тестар ҡулланмаһы. – Өфө: Педкнига, 2008. – 96 бит
Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.
Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2009.
Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-8-се кластары өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә методик күрһәтмәләр. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2006.
Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. Башҡорт телен дәүләт теле итеп өйрәнеүселәр өсөн. – Өфө: Китап, 2009. – 128 бит.
Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт (дәүләт) теле буйынса уҡыусыларҙың телмәр үҫтереүенә, яҙма эштәренә, дәфтәр тотоуҙарына һәм яҙма эштәр үткәреүгә берҙәм талаптар. (Протокол №4, 13 ғинуар 2010 йыл)
Усманова М. Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа.
Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.-Өфө:Китап, 1996.
Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудио-видео әсбаптар.- Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы. 2005.
Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология. - Башҡортостандың бәләкәй даһийы. Өфө : «Эдвис» уҡытыу – методика үҙәге, 2008.

Материаль-техник ҡулланмалар

- телевизор;
- компьютер;
- принтер;
- DVD-проигрыватель,
- Аудио-видеомагнитофон.

Төп һәм өҫтәлмә әҙәбиәт

1.Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-се синыф уҡыусылары өсөн дәреслек. Усманова М.Ғ. һ.б. – Өфө: Китап, 2008
2.Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
3.Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
4.Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым – Өфө: Китап, 2007.
5.Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
6.Балалар уйын фольклоры. Сөләймәнов А.М. – Өфө, Китап, 2007.
7.Балалар өсөн йөҙ йыр. Юнысова Г.А. – Өфө, Китап, 2003

*Тематик план*
*7 класс, йылына – 70 сәғәт*
*Аҙнаға 2 сәғәт иҫәбенән*

| № | Темалар | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлек төрҙәре | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План | факт | |
| 1 | Яңынан мәктәпкә. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 3 09 | | |
| 2 | М.Кәрим “Уҡытыусыма”. | Шиғырҙы аңлы,шыма,тасуири уҡыу,үҙ аллы эстән уҡып,йөкмәткеһен үҙләштереү,әҫәр аҙағында бирелгән һорауҙарға яуаптараша йөкмәткеһен иптәшенә һөйләү. | 4 09 | | |
| 3 | В.Баймырҙина “Дуҫлыҡ”.Башҡорт алфавиты. | | 10 09 | | |
| 4 | Башҡорт алфавиты | Алфавит тәртибендә хәрефтәрҙе хәрефтәрҙе дөрөҫ әйтеү.Тормошта ҡасан һәм ҡайҙа алфавитты белеүҙең кәрәклеген аңлау.Үҙең йәшәгән ҡала,ауыл,урамдың исемдәрен яҙыу,дөрөҫ яҙылышын иптәшенә аңлатыу. | 11 09 | | |
| 5 | З.Биишева “Башҡорт теле” | Әҫәрҙең жанрын билдәләү,шиғырҙы сәсмә әҫәрҙән айыра белеү,йөкмәткеһен тыңлап аңлау,тасуи ри уҡыу. | 17 09 | | |
| 6 | Т.Йосопов “Япрактар бураны” | | 18 09 | | |
| 7 | Инша “Көҙ” | | 25 09 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 8 | Алтын башаҡтар әкиәте | Әкиәтте һөйләй белеү,һорауҙарға яуап биреү.Әкиәттәрҙе сәхнәләштереү үҙенсәләктәренә төшөндөрөү. | 1 10 | | |
| 9 | Ауыл тормошо.Кешеләре. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 2 10 | | |
| 10 | Һүҙбәйләнеш.Һөйләм төҙөлөшө. | | 8 10 | | . |
| 11 | Т.Йосопов “Икмәк еҫе” Сифат ҡылым. | | 9 10 | | |
| 12 | Н.Мусин “Тәбиғәт тураһында”. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 15 10 | | |
| 13 | Бал ҡорто. | Бал ҡорто тураһында белергә | 16 10 | | |
| 14 | Изложение “Тейен менән бүре” | | 22 10 | | |
| 15 | Башҡортостан буйлап сәйәхәт” | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш | 23 10 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | итеү | | | |
| 16 | Р.Ғарипов.Тормошо һәм ижады. | | 29 10 | | |
| | | | | | |
| 17 | Контроль диктант “Халыҡ нимә ти” | | 30 10 | | |
| 18 | Хаталар өҫтөндә эш.Бай рухлы шәхестәр | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 5 11 | | |
| 19 | Х.Назар “Урал имәне” | | 6 11 | | |
| 20 | Арҡайым.Тәбиғәт һәйкәлдәре. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 12 11 | | |
| 21 | Изложение.Мәктәпкә тәү барған көн. | | 13 11 | | |
| 22 | Хаталар өҫтөндә эш .Спорт. Беҙҙең ғаилә ярышта. | | 19 11 | | |
| 23 | Спорт өлкәһендә данлыҡлы кешеләр. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 20 11 | | |
| 24 | “Футбол” тексы өҫтөндә эш | | 26 11 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 25 | Т.Яблонскаяның “Иртә” картинаһы буйынса инша. | | 27 11 | | |
| 26 | Милли уйындар. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 3 12 | | |
| 27 | Башҡортостан-чемпиондар иле. | | 4 12 | | |
| 28 | Ғ.Рамазанов “Яңы йыл менән!” | | 10 12 | | |
| 29 | Контроль диктант “ Бил бирмәҫ батырҙар” | | 11 12 | | |
| 30 | Хаталар өҫтөндә эш.К.Шафиҡова “Әсәйемә” | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 17 12 | | |
| 31 | Ҡылымдың зат,һан,заман менән үҙгәреше**.** | | 18 12 | | |
| 32 | “Ҡошҡа әйләнгән әбей” әкиәте | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 24 12 | | |
| 33 | Ҡылымдын зат,заман,һан менән үҙгәреше. | | 25 12 | | |
| 34 | Һорауҙарға яуаптар. | | 14 01 | | |
| 35 | Шәжәрә.К.Даян.”Атай кәңәше” | Шәхсән: әхләки – | 15 01 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | | | |
| 36 | С.Әлибаев.”Матур көн” | | 21 01 | | |
| 37 | Инша “Ҡоштар-беҙҙең дустарыбыҙ” | | 22 01 | | |
| 38 | Хата өҫтөндә эш.Ф.Рәхимғолова “Беҙҙҙең әсәй” | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 28 01 | | |
| 39 | З.Воскресенская.”Әсә”Теркәүес тәр.Теҙеү теркәүестәре. | | 29 01 | | |
| 40 | “Етегән йондоҙ” Әкиәт. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 4 02 | | |
| 41 | Х.Әхмәтов-композитор | | 5 02 | | |
| 42 | Диктант”Башкорт балы” | | 11 02 | | |
| 43 | Хаталар өҫтөндә эш. Й.Солтанов. “Кәнәфер сәскәһе”. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән | 12 02 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | | | |
| 44 | Х.Әхмәтов тормош юлы һәм ижады. Теркәүестәр. | | 18 02 | | |
| 45 | Ҡумыҙсы Роберт Заһретдинов. Эйәртеү теркәүестәре. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 19 02 | | |
| 46 | С.Юлаев ижады. “Егеткә”шиғыры. | | 25 02 | | |
| 47 | А.Игебаев “Тумыртҡа”.Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы. | | 26 02 | | |
| 48 | Исемдәрҙә – ил тарихы. Бәйләүестәр. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 3 03 | | |
| 49 | Изложение “Һандуғас тауышы” | | 4 03 | | |
| 50 | Б.Х.И. “Ирәндек”әкиәте. | | 10 03 | | |
| 51 | Ф.Туғыҙбаева “Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?” Киҫәксәләр. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема | 11 03 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | | | |
| 52 | Ш.Бикҡол “Тыныслыҡ кәрәк”. Мөнәсәбәт һүҙҙәр. | | 17 03 | | |
| 53 | К.Кинйәбулатова “Дуҫтарым күп”. Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 18 03 | | |
| 54 | Диктант”Яҙ һынамыштары” | | 24 03 | | |
| 55 | Хаталар өҫтөндә эш. Йомғаҡлау. | | 7 04 | | |
| 56 | Г.Юнысова “Умырзая”. Ымлыҡтар. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 8 04 | | |
| 57 | Р.Мөхәммәтов “Тауышһыҙ Талип”.Мөнәсәбәт һүҙәр. | | 14 04 | | |
| 58 | С.Әлибай “Ҡайын һыуы”. Ымлыҡтарҙың дөрөҫ яҙылышы. | | 15 04 | | |
| 59 | М.Ғафури “Болон”. Ымлыҡтарҙың дөрөҫ яҙылышы. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: | 21 04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | Һүҙлектәр менән эш итеү | | | |
| 60 | “Пушкин һәм китаптар.”. Текст менән эш. | | 22 04 | | |
| 61 | З.Котлогилдина “Йәй”.Үтелгәндәрҙе нығытыу. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 28 04 | | |
| 62 | Үҙе сәскә, үҙе сәғәт. | | 29 04 | | |
| 63 | Б.Байым. “Ямғыр яуа”. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 5 05 | | |
| 64 | М.Дилмөхәмәтов “Сәскә менән күбәләк”. | | 6 05 | | |
| 65 | Н.Ҡотдосов “Ҡырмыҫҡалар”. | | 12 05 | | |
| 66 | Б.Бикбай “Лагерь иртәһе”. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү | 13 05 | | |
| 67 | Диктант”Тәбиғәт ҡосағында” | | 19 05 | | |
| 69<br>70 | Хаталар өҫтөндә эш.<br>Йомғаҡлау. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау | 20 05<br>26-27 05 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш итеү. | | | |